## Донъяла

**АНГЛИЯЛА ИҢ НЫҠ ТАРАЛҒАН ИСЕМ - МӨХӘММӘД.** Британияның сабый исемдәре статистикаһы институты хәбәр итеүенсә, Англияла һәм Уэльста бишенсе йыл инде Мөхәммәд иң таралған исем булып тора. Рәсми мәғлүмәттә "Мөхәммәд" исеменең - беренсе, ә "Гарри"ҙың икенсе урында тороуын раҫлай. Һәм ул йылдың-йылы нығырақ тарала бара. Профессионал атлет Му (Мөхәммәд) Фарах Лондонда үткән Олимпия уйындарында оҙон дистанцияла ике алтын миҙал алғандан һуң, бәпестәренә был исемде ҡушырға теләүселәр тағы ла күбәйәсәк, тиҙәр. Шулай уҡ, сабыйҙарына "Мөхәммәд" тип ҡушыусыларҙың артыуын Бөйөк Британияла мосолмандарҙың күбәйә барыуы менән дә аңлатадар.

"Джек" тигән исем Англияла 14 йыл буйы беренсе урынды биләп торғайны. 2010 йылда Daily Mail гәзите: "2009 йылда "Мөхәммәд" "Гарри"ҙы ла "Джек"ты ла үтеп китте", тип хәбәр итте.

* * *

Демографтар фаразлауынса, 2025 йылда мосолмандар планета халҡының өсөнсө урынына күтәреләсәк. Был үҙ сиратында хәләл ҡунаҡханаларҙың артыуына килтерәсәк. Хәҙер донъяла шундый хәл күҙәтелә: ҙур ҡалаларҙа көн итеүсе бай мосолмандар үҙҙәренең ғаиләләре менән донъя буйлап сәйәхәт итеүҙе хуп күрә, улар ҡайҙа барһалар ҙа, Ислам ҡануны талап иткән ресторандарҙы, ҡунаҡханаларҙы табырға тырышалар.

Әлегә мәлдә ер шарында 1,8 миллиард мосолман йәшәй, улар һаны, әлхәмдулиллаһ, планетабыҙҙың 30 процентына барып етәсәк. Тимәк, мосолмандарҙың ихтыяжы ла үҫә барасаҡ.

Туризм иһә - иҡтисадтың аҡсаһы йүнәлтелә торған бер генә тармағы, ҡайһы бер мәғлүмәттәр буйынса, мосолмандар, бүтән туристарға ҡарағанда, күберәк аҡса тотона икән. Америкалағы бер консалтинг компанияһы хәбәр итеүенсә, былтыр мосолмандар 192 миллиард самаһы доллар аҡса тотонған.

Мосолмандар яратып барған урындар тип, Мысыр, Малайзия, Төркиәне атайҙар. Ә мосолман булмаған илдәр араһында Австралия беренсе урында тора икән.

* * *

Планетаның иң ҡарт кешеһе, 123 йәшлек мосолман, телереклама йондоҙона әүерелде. Был хөрмәтле уҙамандың исеме Муса Татар, ул Төркиәнең көнъяҡ-көнсығышында Каһраманрамаш виләйәтенең Төркоглу районында йәшәй.

Аҡһаҡал 1889 йылда, йәғни Осман Хәлифәте осоронда донъяға килә, революцияны, артабан Төркиәнең үҙаллылыҡ өсөн һуғышын, шулай уҡ беренсе һәм икенсе бөтөн донъя һуғышын кисерә.

Әлеге мәлдә үҙенең 12 балаһы менән көн итә, 65 ейәне бар. Өс тапҡыр өйләнә, олатайҙың хәтере яҡшы, сәләмәтлегенә зарланмай. Оҙон ғүмер серен тәбиғи йәшәү рәүеше һәм ябай ризыҡ ашауы менән аңлата.

Ғүмеренең байтаҡ өлөшөн Муса ҡарт диңгеҙ эргәһендә үткәрә, һарыҡсылыҡ менән шөғөлләнә. Туҡланғаны кәҙемге төрөк аштары - брынза, зәйтүн емеше, йәшелсә һәм ашарға яраҡлы төрлө үлән. Уҙамандың сәләмәт тормошо башта - журналистарҙың, тораракреклама продюсерҙврының иғтибарын йәлеп итте. Һуңғылары Мусаға бер төрөк фирмаһының тәм-томон рекламалауҙа ҡатнашырға саҡыра. Мосолман ҡарт ризалыҡ бирә. Уның шундуҡ актер һәләте лә асыла, күп тә үтмәй был уҙаманды "йондоҙҙар" исемлегенә индерәләр.

## Филем һәм ғәмәл

# ДОҒА ҚЫЛЫУ ТӘРТИБЕ

### Ҡөрьән уҡығас бағышлау һәм саҙаҡаларға доға ҡылыу тәртиптәре

*Бисмилләәһир-рахмәәнир-рахиим.*

Һәр эштең әүәлендә "бисмилләәһир-рахмәәнир-рахиим"ды әйтеүгә ғәҙәтләнеү кәрәктер.

Пәйғәмбәр ғәләйһис-сәләм әйткән: "Аллаһ Тәғәлә Ләүхел Мәхфүҙ менән ҡәләмде яратты. Һәр нәмә Ләүхүл-Мәхфүҙдә (күктәге яҙыла торған китап) яҙылғандыр. Унда яҙылғандан тыш һис бер нәмә булмаҫ.

Аллаһ Тәғәлә ҡәләмгә әйтте: "Ләүхел-Мәхфүҙгә яҙ!" - тине. Ҡәләм әйтте: "Эй, Раббым! Ниндәй һүҙ менән башлайым", - тине.

Аллаһ Тәғәлә әйтте: "Бисмилләәһир-рахмәәнир-рахиим, тип башла", - тине.

Ҡәләм "Бисмилләәһир-рахмәәнир-рахиим" тигән һүҙҙе 700 йыл буйына яҙҙы.

Аллаһ Тәбәрәкә үә Тәғәлә әйтте: "Үҙемдең ғиззәтем һәм жәләлем менән ант итеп әйтәм, кем дә кем Мөхәммәд ғәләйһиссәләм әммәтенән ихлас менән "Бисмилләәһир-рахмәәнир-рахиим" тип әйтһә, уның ғәмәл дәфтәренә 700 йыллыҡ ғибәҙәт сауабын яҙырмын". Әмин.

Икенсе хәбәрҙә килгәндер: "Ҡиәмәт көнөндә Мөхәммәд ғәләйһис-сәләм әммәтенең ғәмәле менән бәни Исраилдәге пәйғәмбәрҙәрҙең әммәттәренең ғәмәлдәре тиңләштерелер". Мөхәммәд ғәләйһис-сәләм әммәтенең бер рәкәғәт намаҙҙарының сауабы башҡа әммәттәрҙең мең рәкәғәт намаҙы сауабына тиндер, бәлки артығыраҡ та булыр. Әмин.

Башҡа әммәттәр әйттеләр: "Был Мөхәммәд ғәләйһиссәләм әммәтенең ғәмәлендә ниндәй хасыят барҙыр, уларҙың бер рәкәғәт намаҙы беҙҙең мең рәкәғәт намаҙыбыҙҙан артығыраҡтыр", - тип.

Аллаһ Тәғәлә әйтте: "Мөхәммәд ғәләйһис-сәләм әммәттәренең намаҙҙарында "Бисмилләәһир-рахмәәнир-рахиим"тигән һүҙ бар, һеҙҙең намаҙҙарығыҙҙа ул юҡ, шуның өсөн Мөхәммәд ғәләйһис-сәләм әммәтенең бер рәкәғәт намаҙы һеҙҙең мең рәкәғәт намаҙҙарығыҙҙан артығыраҡтыр".

Кем дә кем "Бисмилләәһир-рахмәәнир-рахиим"-ды һәр ваҡыт уҡыһа, ул кеше утта янмаҫ, һыуҙа батмаҫ, йылан саҡмаҫ һәм ағыуҙар зарар бирмәҫ.

Риүәйәт ҡылынды: Пәйғәмбәр ғәләйһис-сәләмдән һораныларр: "Шайтан ниндәй кеше менән бергә ашар?" - тип. Пәйғәмбәр ғәләйһис-сәләм әйтте: "Әгәр кеше тағам ашағанда "бисмилләһ" - те әйтмәһә, шайтан шул кеше менән бергә ашар, "бисмилләһ"-те әйткән кешеләрҙән ҡасыр".

Пәйғәмбәр ғәләйһис-сәләм сәхәбәләре менән тағам ашап ултыра ине. Шул ваҡыт сәхәбәләр уның (үҙ алдына) йылмайып ҡуйыуын күрҙеләр: "Эй, Рәсүлүллаһ, ниндәй күңелле нәмә күрҙең?" - тип һораныларр. Пәйғәмбәр ғәләйһис-сәләм әйтте: "Һеҙҙең арағыҙҙан бер-егеҙ "бисмилләһ" те әйтмәй ашай ине, шайтан-ләғин дә уның янында ашай ине. Кинәт кенә был кеше хатаһын иҫенә төшөрөп "бисмилләһ" те әйтте, шайтан - ләғин тиҙ-тиҙ уның аркаһынан төшөп китте, шуны күреп йылмайҙым", - тине.

Ғалимдар әйткәндәр: "Бисмилләәһир-рахмәәнир-рахиим һүҙендә 19 хәрефтер (ғәрәп хәрефтәре менән), бында файҙа барҙыр:

Бер-е шулдыр - ғазап фәрештәләренең ололары 19-ҙыр. Кем дә кем һәр ваҡыт "Бисмилләәһир-рахмәәнир-рахиим" тип әйтһә, 19 ғазап фәрештәләренән ҡотолор, ғазап ҡылынмаҫ.

Икенсе файҙа - кис менән көн - 24 сәғәттер. Шул 24 сәғәттә биш ваҡыт намаҙ фарыздыр. Был 19 хәрефле "бисмилләһ" сәғәт араларында булған гонаһтары кисерелеүгә сәбәптер.

Кем дә кем ихласлыҡ менән "Бисмилләәһир-рахмәәнир-рахиим" тип әйтһә, Аллаһ Тәғәлә ул кешенең ошо 24 сәғәт эсендә хаталыҡ менән ҡылған гонаһтарын ғәфү итер (әгәр ул хаталарҙы яңынан ҡабатламаһа). Әмин.

Эй, Раббым! Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәд Мостафа салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең бөтөн әммәтенә тәүфиҡ бирә, һәр ваҡытта Аллаһ исемен зикер ҡылып, гонаһтарын ярлыҡаһаң ине. Үҙең беҙгә бүләк итеп биргән биш ваҡыт намаҙҙарыбыҙҙы үҙ ваҡытында дөрөҫ итеп үтәргә насип итһәң ине. Әмин - доғаларыбыҙҙы ҡабул ҡыл.

#### Доға өсөн кәрәкле нәмәләр

Доға - "һорау, ялбарыу" тигән һүҙ.

Доғаның ҡабул булыуы өсөн доға ҡылыусы кешенең ашаған һәм эскән нәмәһе, өҫтөнә кейгән кейемдәре хәләл, пак (таҙа) булырға тейешлелер. Бының тураһында Рәсүлебеҙ ғәләйһис-сәләм: "Харамдан (харам - салғанда Аллаһ исеме зикер ителмәйенсә салынған хайуан ите ("бисмилләәһи, Аллаһу әкбәр" тип), маргарин майҙары, йырткыс хайуандарының ите, суҫка ите һәм майҙары, колбасалары, араҡы, иҫерткес эсемлектәр һәм башҡалар) эсенә берәй нәмә кергән кешенең 40 көнгәсә доғаһы ҡабул булмаҫ", - тигән.

"Доға - ғибәҙәттең елегелер".

Доға - ҡылыусы кеше доғаһын ысын күңеле менән, доғаһы ҡабул булыуына шик тотмайынса ҡылырға тейешлелер. Бының тураһында Ибн Фәббәс хәҙрәттәре Рәсүлебеҙ ғәләйһиссәләмдән күсерҙе: "Доға ҡылаһығыҙ икән Аллаһ Тәғәләгә, доғағыҙҙың ҡабул булыуында шик-шөбһәһеҙ булығыҙ, ысын ниәт менән ышанып доға ҡылһағыҙ, доғағыҙ ҡабул булыр".

Белегеҙ: Аллаһ Тәғәләнән һораған нәмәнән шик тотоусоноң доғаһы ҡабул ҡылынмаҫ. Һәр бер доға ҡылыусы доғаһының ҡабул булыуында шик тотмаҫҡа тейеш. Уның өсөн: доғаның ҡабул булмауы Аллаһ Тәғәләнең доға ҡылыусының һораған нәмәһен бирергә көсө етмәүҙәме? Әлбиттә, түгел. Аллаһ Тәғәләнең бар нәмәгә көсө етә.

Йә иһә: доғаның ҡабул булмауы Аллаһ Тәғәләнең мәрхәмәт, йомартлыҡ эйәһе булмауынанмы? Әлбиттә, түгел. Аллаһ Тәғәлә йомарт, ни һораһаң, шуны бирәлер.

Йә иһә: доғаның ҡабул булмауы Аллаһ Тәғәләнең доға ҡылыусының доғаһын белмәүенәнме? Әлбиттә, түгел. Аллаһы Тәғәлә һәр бер нәмәне белеүселер.

Был өс нәмә, өсөһө лә мөмкин була торған эш булмаһа, доға ҡылыусы үҙенең доғаһының ҡабуллығында шик тотмаҫҡа тейеш, сөнки Аллаһ Тәғәләгә шик ҡылһа, был бик оло, насар булған эштер. Доғаның ҡабул булыуында шик тотмаҫҡа тейешлелер.

#### Доға ҡылыуҙың рәүеше

Доға ҡылыусы иң тәүҙә Аллаһ Тәғәләгә хәмед әйтеп, Рәсүлебеҙ ғәләйһис-сәләмгә салауат әйтер. Мәҫәлән: "Әлхәмдү лилләһи Раббил ғәәләмин, үәссалааәтү үәс-сәләәмү ғәләә расүүлиһи Мөхәммәдин үә ғәләә әәлиһин үә сахбиһии әджмәғиин", - тиер. Бының һуңында ҡулдарын күтәреп теләгән нәмәһен һорап доға ҡылыр. Доғаны ҡылып бөтөргәс, йәнә хәмед һәм салават әйтер.

#### Доға өсөн шәриф ваҡыттар

Доға ҡылыусы доғаны шәриф ваҡыттарҙа ҡылыр. Шуны белергә кәрәк - һис бер көн дә һәм һис бер кис тә доғанан буш булмаҫ, ләкин ошо ваҡыттарҙа бигерәк тә ҡабул булыр.

Мәҫәлән:

*Йома көнө аҙан ваҡыттары яҡынлашҡас, йома көнөнең ҡояш байыуы алдындағы сәғәттә, йома көнөндә аҙан ваҡытында;*
*Аҙан менән ҡәмәт араһыда;*
*Намаҙ уҡырға торған ваҡытта;*
*Һәр көн төш ваҡытында;*
*Төндөң ахыры, өсөнсө өлөшөндә доға ҡылыр;*
*Сәхәр ваҡытында;*
*Рәжәб айының әүәлге кисәһендә;*
*Шәғбән айының 15 кисәһендә,*
*йәғни Бәрә,әт кисәһендә;*
*Рамаҙан айының Ҡәҙер кисәһендә;*
*Фәрәфә көнөндә;*
*Ике ғәйет кисәһендә;*
*Ураҙала ауыҙ асҡан ваҡытта;*
*Ҡалебе (йөрәге) йомшарған ваҡыттарҙа, уның йөрәгенең йомшарғаны Аллаһ Тәғәләнең рәхмәтендәндер;*
*Йоҡонан уянған ваҡытта Аллаһ Тәғәләнең ололоғон фекерләп доға ҡылыу ғәнимәт булыр;*

Ауырыған ваҡытта доға ҡылыу тейешле, быға дәлил хәҙрәти Ғүмәр радыяллаһу ғәнһү Рәсүлүллаһ ғәләйһис-сәләмдән риүәйәт ҡылған: "Һәр ҡасан һин ауырыу кеше янына инһәң, үҙеңә доға ҡылырға ҡуш, сөнки ауырыу кешенең доғаһы фәрештәләрҙең доғаһы кеүек".

Өйҙән айырылған ваҡытта (ҡайҙа ла булһа барырға сығып киткәндә) доға ҡылыу тейешлелер ("Аятүл-Күрси"-не уҡыу яҡшы булыр).

Риүәйәт ҡылдылар: Аятүл Көрси ингәс, һынымдар (тәреләр) батшалар йөҙҙәренә ауҙылар, таждары баштарынан төштө һәм шайтандар барып Иблискә хәбәр бирҙеләр. Иблис әйтте: "Мәдинәгә барып ҡарағыҙ". Мәдинәгә барып ҡараһалар, "Аятүл Көрси" ингән. Рәсүлүллаһ ғәләйһис-сәләм әйтте: "Һәр кем намаҙ һуңында "Аятүл Көрси"-не һәр ваҡыт уҡыһа, ул кешене үлемдән башҡа нәмә йәннәткә инеүҙән тыймаҫ", - тине. Әмин.

Биш ваҡыт намаҙ уҡығандан һуң, һәр бер-е-нә доға ҡылыу тейешлелер;

Ҡөрьән хәтем иткән ваҡытта доға ҡылыу тейешлелер;

"Ихлас" ("Ҡулһүүаллаһ") сүрәһен уҡығандан һуң доға ҡабул булыр.

Риүәйәттер: "Жәбраил фәрештәнең ҡанатында" Ҡуль һүүәллааһу әхәд", Исрафил фәрештәнең ҡанатында "Аллаһүс-самәд", Микәил фәрештәнең ҡанатында "Ләм йәлиде үә ләм йүүләде", Ғазраил фәрештәнең ҡанатында "Үә ләм йәкүл-ләәһүү күфүүән әхәд", тип яҙылғандыр.

Хәбәрҙә килә: "Бер кеше төшөндә 100 күтәрсендең 99-ын башһыҙ итеп, бер-е-нә башлы итеп күргән". Ул төш юраусыға барған һәм төшөн һөйләгән. Төш юраусы әйткән:" Һин "Ҡулһүүаллаһ" сүрәһен уҡыған һәр бер "Ҡулһүүаллаһ" уҡыған һайын "бисмилләһ" әйтеп уҡымағанһың, бер-е-нә генә "бисмилләһ" әйтеп уҡыған-ның", - тигән.

Мосолман йәмәғәттәре күп йыйылған урында доға ҡабул булыр (мәсеттә).

Әнғәм сүрәһендә ике ләфҙәтуллаһ араһында доға ҡабул булыр (Ҡазан баҫмаһы Ҡөрьәнендә 131-се бит, 124-се аят, аҫтан 5 юл).

Ямғыр яуған ваҡытта доға ҡабул булыр, уның өсөн ул ямғыр Аллаһ Тәғәләнең кешеләргә биргән рәхмәтелер.

Вәғәз, зикер мәжлестәрендә доға ҡабул булыр.

Әтәс ҡыҫҡырған ваҡытта доға ҡабул булыр.

Сәхәбәләр әйттеләр: "Эй, рәсүлүллаһ ғәләйһис-сәләм! Беҙ ҡасан доға ҡылһаҡ доғаларыбыҙ ҡабул булыр икән?" - тип.

Аллаһ Сүбхәнә үә Тәғәлә был аятты индерҙе:

"Бисмилләәһир-рахмәәнир-рахиим... үә иҙәә сә,әләкә ғибәәдии ғәннии фә иннии ҡарииб, үҙиибү дәғүәтәддәәғии иҙәә дәғәән... ("Бәҡара" сүрәһе, 185 аят).

Мәғәнәһе: "Эй, Мөхәммәд ғәләйһис-сәләм! Әгәр минең ҡолдарым һинән һораһа, доғаларын ҡабул итеүем хаҡында. Ҡабул ҡылырмын доға ҡылыусының доғаһын ҡайһы ваҡыт ҡылһа ла, ләкин: (... фәл-йәстәжиибүү лии...) яуап бирһендәр миңә мөьминдәр ғибәҙәт менән (биш ваҡыт намаҙ уҡыһындар, ураҙа тотһондар, зәкәттәрен бирһендәр).

***(Дауамы бар).***

**"Дәғүәт" нәшриәте.**